*Зөһрә КАМАЛОВА*

# Унғандар уңышҡа ҡыуана

Халҡым теле миңә — хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ.
Илен һөймәç кенә телен һөймәç,
Иле юҡтың ғына теле юҡ.
*Рәми Ғарипов.*

Уҙған йылда мәғариф өлкәһендә өлгәшкән ҙур уңыштары һәм ҡаҙаныштары өсөн Башҡортостандан 109 мәктәп һәм 363 уҡытыусы, Рәсәй күләмендә иғлан ителгән абруйлы һәм яуаплы бәйгеләә еңеп, грант яуланы. Ошоға ярашлы, һәр мәктәп 1 миллион, ә һәр уҡытыусы 100 мең һум күләмендә аҡсалата премия алды.


*Әлфирә Нуриева*

Еңеүселәр араһында Дыуан районы Мәсәғүт республика лицей-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы Әлфирә Йәмил ҡыҙы Нуриева ла бар.

Билдәле булыуынса, грант яулау өсөн күптәргә өлгө күрһәтеп эшләргә, уҡытҡан уҡыусыларыңдың белемле, эрудициялы булыуына өлгәшеү зарур. Әлфирә Йәмил ҡыҙы был йәһәттән һис тә һынатмай. Мәсәғүт республика лицей-интернатында ул 1998 йылдан алып эшләй, ә дөйөм педагогик стажы 15 йыл. 2000 йылда район күләмендә үткәрелгән «Иң яҡшы башҡорт теле уҡытыусыһы» бәйгеһендә еңеп сыҡҡан, «2000 йылғы иң яҡшы уҡытыусы» Республика конкурсында ҡатнашып, бүләккә лайыҡ булған.

Ғәҙәттә уҡытыусыларҙың уңышын уҡыусыларына, уларҙың еңеүҙәренә ҡарап баһалайҙар. Был йәһәттән дә уңыштары бик күп, табыштары байтаҡ Әлфирә Йәмил ҡыҙының. Мәçәлән, 2004—2005 уҡыу йылында унын уҡыусыһы Зоя Дадебаева (11-се синыф) «Мәжит Ғафури һәм башҡорт халыҡ эпосы «Заятүләк менән Һыуһылыу» тигән уңышлы эше өсөн М.Ғафуриҙың тыуыуына 125 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән республика тыуған яҡты өйрәнеү буйынса уҡыуҙарҙа I дәрәжә диплом яулаған. Ә 10-сы синыф уҡыусыһы Роза Нафиҡова күренекле шағирға

арнап яҙған «Мәжит Ғафури — рух һәм илһам ҡояшы» тигән ҡобайыр-иншаһы өсөн I дәрәжә дипломға лайыҡ булған. Әйткәндәй, Роза уҡытыусыһының ярҙамы менән 2004 йылда «Салауат Юлаевҡа арналған тәүге проза әҫәре» тигән доклад менән «С.Юлаевтың тормошонда һәм ижадында азатлыҡ идеялары» Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһында ла уңышлы сығыш яһаған. Зоя Дадебаева, Роза Нафиҡовалар шулай уҡ башҡа бик күп төрлө бәйгеләр һәм номинациялар лауреаттары.

Ғөмүмән, Әлфирә Йәмил ҡыҙының уҡыусылары мәктәп, район, республика күләмендә уҙғарылған һәр бәйгелә әүҙем ҡатнаша һәм призлы урындар яулай.

Әлфирә Нуриева етәкселегендә лицейҙа «Йәйғор» исемле мәктәп гәзите даими сығарыла килә. Унда лицей-интернаттың ҡәҙимге тормошо, уңыштары, ҡаҙаныштары, уҡыусыларҙың ижад емештәре сағылыш таба. Уның уҡыусылары район, республика гәзиттәре һәм журналдары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. «Йәшлек», «Йәншишмә» гәзиттәрен, «Аманат» журналын алдырып уҡыу менән бергә, үҙҙәре лә әүҙем хәбәрсе булып танылған. Мәҫәлән, Ирина Ҡаһирова — 2002 йылда, ә Роза Нафиҡова 2003 йылда «Йәш хәбәрсе» танытмаһын алған.

Лицей-интернатта эшләү осоронда талантлы уҡытыусы уҡыусылары менән берлектә тыуған яғы (район һәм ауыл), данлыҡлы яҡташтары тураһында бай материал туплауға өлгәшкән. Ул биҙәп әҙерләгән «Башҡортостан мәҙәниәте» кабинетында «Башҡорттарҙың тормош-көнкүреше, йорт-йыһазы», «Башҡорт халҡының кейеме һәм биҙәнеү әйберҙәре», «Башҡорт халыҡ ҡоралдары» һәм башҡа экспозициялар күңелдәрҙе арбай. Был материалдарҙы лицей-интернаттың башҡа уҡытыусылары ла төрлө дәрестәр һәм синыфтан тыш эштәр уҙғарыуҙа киң файҙалана.

*Әлфирә Нуриева дәрес бирә*



Беҙ үҙгәрештәр көнләп түгел, сәғәтләп, минутлап булып торған заманда йәшәйбеҙ. Шуға күрә алдынғы уҡытыусы үҙенең белем кимәлен, оҫталығын даими камиллаштырыу өҫтөндә эшләй: квалификация күтәреү курстарында була, өр-яңы методик әсбаптарҙы әүҙем өйрәнә, һәр яңылыҡты уҡыу процесына йылдам индерергә ынтыла. Әйтәйек, һуңғы осорҙа Әлфирә Йәмил ҡыҙы информацион технология-

ларҙы дәрестә ҡулланыу өлкәһендә байтаҡ уңыштарға өлгәшкән, ул күрһәткән асыҡ дәрестәр республика фәнни-ғәмәли конференцияларында ҡатнашыусыларҙың юғары баһаһына лайыҡ булған.

Тәжрибәле уҡытыусы булараҡ, йыл һайын Башҡорт дәүләт университеты, Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы, Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Мәсәғүт педагогия колледжы студенттарының практикаһына етәкселек итә, уларға уҡытыусы һөнәренең серҙәрен асырға ярҙам итә.

Бына шундай ул Арый ауылы ҡыҙы Әлфирә Нуриева. «Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр» тигәндәй, ата-әсәһе икеһе лә уҡытыусылар. Атаһы Йәмил Тәфҡәлин улы ғүмер буйы физика фәнен уҡыта, өс тиҫтә йылдан ашыу Арый урта мәктәбе директоры вазифаһын биләй. Мәғариф өлкәһендәге уңыштары өсөн «Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған уҡытыусыһы» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булған юғары категориялы уҡытыусы. Әсәһе Мөнирә Ғата ҡыҙы иһә математика уҡытыусыһы. Үҙе Шишмә яғынан булһа ла, Йәмил ағай менән Мәсәғүт педагогия училищеһында уҡығанда танышып, матур ғаилә ҡорғандар, береһенән-береһе матур, уңған ҡыҙҙар һәм малайҙар үҫтергәндәр.

Донъя йөгөн мәктәптә лә, өйҙә лә тигеҙ тартҡас, тормош-көнкүрештәре лә етеш, һәр кемгә өлгө булып торғандар. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уҙған йыл Мөнирә Ғата ҡыҙы ҡапыл ғына вафат булып ҡалған. Әлбиттә, был Әлфирә Йәмил ҡыҙы өсөн иң ҙур юғалтыу. Ул үҙе лә, туғандары ла аталарын оҙаҡҡа яңғыҙ ҡалдырмаҫҡа тырыша, аҙна һайын ҡайтып, йорт эштәрен башҡарып, ярҙам итеп китәләр.

*Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы, БДУ студенттары практика үткәндә*






*Грант алған укытыусылар (Дыуан районы)*

Республика лицей-интернаты урынлашҡан Мәсәғүт ауылы хәҙер арыбире ҡасабаларға биргеһеҙ, бында бер-бер артлы күркәм йорттар, коттеджҙар ҡалҡып сыға. Йорт хужалары араһында йәштәрҙең күп булыуы айырыуса ҡыуандыра. Тимәк, киләсәктә балалар һаны ла артасаҡ.

Әлфирә Йәмил ҡыҙы үҙе ғүмерлеккә һайлаған һөнәренә ҡыуанып бөтә алмай. Яҡын-тирә райондар һәм ауылдар өсөн белемле, зауыҡлы уҡытыусылар әҙерләүсе Мәсәғүт педагогия училищеһына айырыуса рәхмәтле. Балаларҙы ысын күңелдән һөйөргә, улар менән бергә янырға һәм көйөргә тәүләп ошонда өйрәттеләр бит уны. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы иң абруйлы белем усағын тамамлап, 21 йәшендә уҡытыусы булып киткәйне ул. Әле бына бала сағынан күңел түрендә урын алған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булыу хыялын тормошҡа ашырған, тырыш һәм өлгөлө хеҙмәте, маҡтаулы уҡыусылары менән дан ҡаҙанған, Дыуан районы педагогтары араһында беренселәрҙән булып оло бүләк — грант алған уҡытыусы ул Әлфирә Йәмил ҡыҙы.

Бала күңелендә туған телгә — күкрәк һөтөн биреп үҫтергән әсә теленә — һөйөү, ихтирам тәрбиәләүсе, халҡыбыҙҙың матур йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен бала күңеленә һеңдереүсе, тимәк, уларҙы килер быуындарға еткереүсе бит ул. Башҡорт теле дәүләт теле статусына эйә булып, башҡа телдәр менән тиңләшеп киләсәккә юл алған тарихи осор. Ошо юлдың уңышлы булыуы иһә Әлфирә Йәмил ҡыҙы кеүек алдынғы уҡытыусыларға бәйле. Туған телен яҡшы белгән, тыуған ерен эше менән данлаған кешеләрҙе тап уның кеүек үҙ эшенә мөкиббән ғашиҡ кешеләр тәрбиәләй ҙә инде.